**Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тыуыуына 165 йыл**

***Ғиниәт ҠУНАФИН,***
***филология фәндәре докторы***

# Яҡтылыҡ һәм ғәҙеллек йырсыһы

Башҡорт милли мәҙәниәте тарихында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙ халҡының тарихи үткәнен, рухи һәм матди культураһын, телен фәнни нигеҙҙә өйрәнгән, уны төрлө фәндәр менән таныштырған ғалим ғына түгел, оригиналь әҫәрҙәр ижад иткән шағир, публицист һәм тәржемәсе булараҡ та тәрән эҙ ҡалдырҙы. Өмөтбаев-ғалим менән Өмөтбаев-әҙип һәр ваҡыт йәнәш атланы. Уның шиғриәте феодализмға, фекер торғонлоғона, дини фанатизмға ҡаршы йүнәлтелгән идея хәрәкәте йоғонтоһонда үҫкән XIX быуат прогрессив башҡорт әҙәбиәтенең йөҙөн билдәләүсе ижад өлгөһө булды. Мәғрифәтселек идеялары М.Аҡмулланан ҡала тап М.Өмөтбаев шиғырҙарында баҙыҡ сағылышын тапты, уның поэзияһының тематикаһын, жанр байлығын һәм ижад алымын билдәләне. Шағирҙың ижадында 60-сы йылдарҙағы урыҫ мәғрифәтселәренең эшмәкәрлектәренә хас төп сифаттарҙың бөтәһенә лә оҡшаш һыҙаттарҙы күрергә мөмкин. Ләкин был әле урыҫ мәғрифәтселәренең әҫәрҙәрендә һәм хеҙмәттәрендә сағылған идеялар менән М.Өмөтбаев әҫәрҙәрендәге уй-фекерҙәр араһына абсолют тигеҙлек билдәһе ҡуйып була тигән һүҙ түгел. Уның ижадында урыҫ мәғрифәтселәренә хас сифаттарҙан икенсеһе, бигерәк тә ”мәғариф эшен... европаса йәшәү формаларын ҡайнар яҡлау” тигән моменттары өҫтөнлөк итә. Бының сәбәбен иһә иң элек ул ижад иткән осорҙа башҡорт йәмғиәтендә күҙәтелгән социаль-иҡтисади шарттарҙың хосусиәтле яҡтарынан эҙләргә кәрәк.

М.Өмөтбаев ижад майҙанына килгәндә, башҡорт халҡы капиталистик үҫеш юлына ныҡлап аяҡ баҫҡайны. Әммә уның тормошонда феодализм ҡалдыҡтары ла үҙҙәрен ныҡ ҡына һиҙҙертә ине. Өҫтәүенә, Башҡортостандың капитализмға тартылыуы колониаль характерҙа булып, баҫым яһау юлдары менән барҙы. Былар бөтәһе лә башҡорт халҡын фәҡирлектә, ҡараңғылыҡта һәм томаналыҡ донъяһында йәшәүгә дусар итте, уның мәҙәниәтенең артта ҡалыуына килтерҙе.

Башҡорт йәмғиәтендәге бына ошондай аяныс күренештәр М.Өмөтбаевтың күҙенә иң беренсе булып салынды. Шағир улар хаҡында янып-көйөп уйланды. Ләкин был күренештәрҙе барлыҡҡа килтереүсе төп сәбәптәрҙе күреү һәм аңлау кимәленә күтәрелә алманы. Нәтижәне, йәғни үҙенең күҙенә күренеп торған нәмәләрҙе сәбәпкә һанап, был "сәбәптәрҙе" — халыҡтың томаналығын, мәҙәни яҡтан артта ҡалыуын бөтөргәндә, уны бәхетле итеп, мул тормошҡа сығарып булыр, тип иҫәпләне. Шунан сығып, ул туған халҡын ағартыу, аң-белем биреү, әхлағын камиллаштырыу йүнәлешендә эш алып барыуҙы үҙенең төп бурысы һананы. Ғөмүмән, М.Өмөтбаев мәғариф эшенә, әхлаҡи-этик мәсьәләләргә ғәйәт ҙур иғтибар бүлде, уларҙа ижтимағи прогресты тәьмин итеүсе иң төп көстәрҙең береһен күрҙе. Шуға ул үҙ ижады менән ысын күңелдән хеҙмәт итте. Әҙәбиәткә ул тәрбиә, аң-белем биреү һәм әхлаҡ дәреслеге итеберәк ҡараны. Нәтижәлә, өгөт-нәсихәтселек, дидактизм элементтары уның поэтик ижадында, бигерәк тә тәүге осор әҫәрҙәрендә шаҡтай урын алды.

Дөрөҫ, өгөт-нәсихәтселек — башҡорт яҙма әҙәбиәтендә, башҡа халыҡтарҙың һүҙ сәнғәтендәге кеүек үк, электән килгән традицион күренеш. Ләкин М.Өмөтбаевтың, ғөмүмән, мәғрифәтсе әҙиптәрҙең ижадтарында күҙәтелгән нәсихәтселек менән урта быуаттарҙағы һәм XIX быуат баштарындағы суфый шағирҙарҙың, назымсыларҙың вәғәздәре араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмай. Бының сәбәбе өгөт-нәсихәттәрҙең, өйрәтмәләрҙең ниндәй идеологияға, ниндәй башланғысҡа нигеҙләнгән булыуында.

Феодализм шарттарында күп кенә шағирҙар кеше һәм тәбиғәт, кеше һәм тормош, йәшәүҙең айышы һәм мәғәнәһе тураһындағы уй-фекерҙәрен уҡыусыларға башлыса дини идеология күҙлегенән сығып, дини башланғысҡа нигеҙләнгән килеш еткерҙеләр. Быуаттар һуҙымында улар кешеләрҙе ислам дине күрһәткән "иң ғәҙел", "иң тура" юлға төшөрөү өсөн вәғәзләп килделәр, уларҙа донъянан ваз кисеү тойғолары тәрбиәләнеләр. Ә бына М.Өмөтбаев ижадына хас булған өгөт-нәсихәтселеккә килгәндә, ул инде башлыса донъяға айыҡ ҡарауға, ысынбарлыҡҡа нигеҙләнгән реалистик эстәлекле өгөт-нәсихәтселек ине. "Башлыса" тибеҙ, сөнки М.Өмөтбаевтың поэзияһы дини элементтарҙан да бөтөнләй үк азат түгел. Диндең үҙен кеше тормошоноң, йәшәйештең нигеҙе итеп, идеалға әүерелдереп ебәрмәгән сүрәттә лә шағир уны, халыҡтың инанған нәмәһе булараҡ, "тәрәҡҡи" юлына илтергә, әхлаҡи сафлыҡ тәрбиәләргә булышлыҡ итеүсе ҡорал рәүешендә файҙаланырға тырыша әле. Шуға ла уның бер талай шиғырҙарында донъяуи характерҙағы философик һәм әхлаҡи-этик ҡараштар дини уй-фекерҙәр менән аралашып, уҡмашып китә. Был бигерәк тә шағирҙың "Ниғмәт шәриф", "Нәсихәт", "Бәйет", "Васыят вә нәсихәт" һәм башҡа шулар ише тәүге ижад емештәрендә асыҡ күренә. Уларҙа халыҡ яҙмышы, кешенең йәмғиәттәге урыны, йәшәүҙең мәғәнәһе, донъяның фанилығы тураһында уйланыу ҙа, кешене кеше иткән намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, итәғәтлелек, шәфҡәтлелек кеүек күркәм әхлаҡ сифаттарын данлау ҙа, уларҙың киреһен тәнҡитләү ҙә, аң-белем һәм тәрбиә мәсьәләләре хаҡында фекер йөрөтөү

ҙә, дини йолаларҙы, ислам ҡанундарын теүәл үтәргә өйрәтеү ҙә бар. Шундай юлдар менән шағир туған халҡында патриархаль-феодаль ҡоролош шарттарында баҫыла килгән кешелек сифаттарын уятырға, төплө аҡыл, дөрөҫлөк талаптарына ярашлы булған әхлаҡ нормаларын урынлаштырырға тырыша. Унынса, кешенең йәмғиәттәге урыны һәм дәрәжәһе байлыҡ менән түгел, белем һәм әхлаҡ кимәле менән билдәләнә. Шул концепциянан сығып, ул үҙ халҡын ғилемгә, мәҙәниәткә һәм юғары әхлаҡи сифаттарға эйә булырға өндәй, фекер һәм хис тулылығын, йомоҡлоҡто, бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмаусанлыҡты тәнҡитләй. ”Фөзули (ҡыҙыҡһыныусанлыҡ), — ти ул үҙенең исемһеҙ бер шиғырында, — мөхәббәт әшнәһе”. Ә инде ”мөхәббәтһеҙ кешенең көнө ҡыштыр, аслан уның яҙы булмаҫ”. Тимәк, тормошондоң йылы көндәрен, яҙын булдырайым тиһәң, ”был ғаләмдә” бер нәмәгә лә битараф ҡалмаҫҡа, ҡыҙыҡһыныусан һәм тырыш булырға, ”ғәфләт” (вайымһыҙлыҡ) донъяһында ятмаҫҡа кәрәк:

Баҫып ғәфләт, йыраҡ ҡалдыҡ, ирәндәр,
Хәләсен (матурлығын) астыбыҙмы, ир тигәндәр.
Үҙебеҙ күрмәһәк жөһден (хәстәрен), туғандар,
Кеше өсөн ҡайғырыу аҙҙыр, тигәндәр.

Наҙанлыҡ һәм томаналыҡ эсендә көн күреүҙе ”диңгеҙҙе кәмәлә ишкәк һәм ҡоралһыҙ сыҡмаға” хитланыу менән бер күргән М.Өмөтбаев кешенең донъяла йәшәү маҡсатының бер элементын үҙ халҡына файҙа килтерерҙәй аң-белемгә ынтылыуҙа күрә. Ул үҙе лә:

Бәнем күңелем был гөлдик ғәнчә булмаҫ (бөрө хәлендә булмаҫ)
Йөрәк ҡаным һыҙылып тынмайынса,
Әгәр йөҙ мең бәһар (яҙ, яҙ көнө) күрһәм төңөлмәҫ
Был ғәмәйәнең кәнәрен (наҙанлыҡтың сиктәрен) күрмәйенсә, —

тип, наҙанлыҡҡа һәм томаналыҡҡа ҡаршы көрәшкә күтәрелә. Бөтә мәғрифәтселәргә хас булғанса, фани донъяла кеше тик үҙ мәнфәғәтен генә күҙәтмәһен, халыҡ ҡайғыһына ҡайғырып, шатлығы менән шатланып йәшәһен, тигән фекерҙе яҡлап, шағир беренсе сиратта уҡымышлы һәр бер кешенең башҡарған эшендә, ҡылған ҡылығында һәм шәхси тормошонда башҡаларға үрнәк күрһәтеүен, ярҙамсыл булыуын теләй.

Ғәжәп хайран улам бән бәғзе иргә,
Алып идраҡ (аң-белем), ғәмәлде бирһә елгә, —

тип, ул үҙ донъяһында бикләнеп, булған белемен юҡ-барға сарыф иткән, уны майҙанға сығармаған кешеләрҙе шелтәләй.

М.Өмөтбаев аң-белемгә эйә булған айырым шәхестәрҙең эшмәкәрлеге йөҙөндә халыҡты алға әйҙәр ҙур көстө күрә. Әйтәйек, беҙ уның 1878 йылда яҙған ”Остаз Мирсалих ибн Мөрсәлим генерал Биксуринға”* (ҡульяҙмала ”Мирсалих хәҙрәткә” тип тә бирелә) тигән мәктүбендә был шәхесте “ғилем баҡсаһында... бер ҙур ғалим” тип мәҙехләүенә тап булһаҡ, ”Ғатаулла ахун Баязитов йәнәптәренә” шиғри хатында авторҙың Баязитовтың мәғрифәтселек эшмәкәрлеген хуплап ҡаршылауын

---

* 1994 йылда баҫылған “Йәдкәр” йыйынтығында әҫәр ҡыҫҡартылып “Остаз Мирсалих Биксуринға” тип кенә бирелде.

күрәбеҙ. Ә ”Дәрсәфәр Ҡырым” әҫәрендә инде ул Исмәғил бәк Ғаспринскийҙы маҡтап сыға, уның: ”Ғафил улма был дардан (вайымһыҙ булма был ерҙән)”, — тип, ”йыһан әхбәрҙе тиреп, газета нәшриәт итеп”, халыҡты ағартыу эшенә һалған хеҙмәтенә үҙенсә юғары баһа бирә.

Тәү ҡарашҡа милли сикләнгәнлек бөтөнләй ят булған шағирҙың буржуаз мәғрифәтсе, пантюркист Ғ.Баязитов менән И.Ғаспринскийҙы мәҙехләп телгә алыуы, уларҙың эшмәкәрлеген юғары баһалауы, мәғрифәтселәргә генә хас булғанса, яҡтылыҡҡа инаныуынан, мәғрифәт еҫен һиҙҙергән теләһә ниндәй күренешкә лә эскерһеҙ ышаныуынан килә ине.

Үҙенең шиғырҙарында М.Өмөтбаев ”Китмәйән дәүләт кешегә ғилем камал, гаһ (бер) килер, гаһ китер тарафына ла ғәнеж (хазина) мал” тигән ҡараштан сығып, кешеләрҙе һәр ваҡыт ғилем вә һөнәргә ғорурлыҡ ҡылмай” йәшәргә, бер ҡасан да бары тик ”ғаҡыл вә мәғрифәт илә бар кәсеп вә һөнәр” артҡанлығын онотмаҫҡа саҡыра[1]. Ул ”кеше аңлы йән эйәһе, шуның өсөн дә ул аҡыл менән етәкселек итергә өйрәнһен” тигән позицияла тора. Әҙип кешенең ”аҡыл менән етәкселек итергә өйрәнеүенең” бик ҡатмарлы процесс булыуын да яҡшы аңлай. ”Мәғрифәт” тигән бер мәҡәләһендә үк әле: ”Иң мөшкөл эш әҙәмгә үҙеңде таныгмаҡтыр. Әммә ғилем өгрәнмәк фараз булған эштер”, — тип, ул ғилемдең кешегә үҙ алдына ғына бирелмәүенә, берәүҙең дә үҙ-үҙенән генә уҡымышлы һәм әхлаҡлы шәхес булып формалашмауына айырыуса баҫым яһай. Уныңса, кешенең юғары әхлаҡи сифаттарға эйә булыуы, мәғрифәтлелеге — уның бала саҡтан уҡ ғаиләлә һәм мәктәптә алған тәрбиәһенең емеше, үҙ тырышлығының нәтижәһе. Ошо ҡараштан сығып, шағир балаларҙы ”остаздан һабаҡ алырға”, ә уларҙың ата-әсәләрен үҙ балаларын тотанаҡлы һәм әҙәпле, кеселекле һәм кешелекле итеп тәрбиәләргә өндәй. Бына ошо урында инде беҙ уның ижадында үҙҙәрен ярайһы ғына һиҙҙерткән дини элементтар менән күҙмә-күҙ осрашабыҙ. Мәҫәлән, уның ”Саут әл-химар” (”Ишәк тауышы”) тигән шиғри хатында һүҙ ынйыларға тиң тыйнаҡлыҡ һәм әҙәплелек ише яҡшы холоҡтарға кешенең нисек эйә булыуы тураһында бара. Әҫәрҙә был сифаттар кешегә хоҙай тарафынан бирелгән бүләк рәүешендә күрһәтелә. Мәгәр шиғыр шаҡтай мәғәнәле, рифмалаштырылған ”өгөт-нәсихәтле” ошондай юлдар менән тамамлана:

Кә йәғни тауышыңды ҡылма ҡәбәхәт,
Ишәк тауышында һис юҡтыр фәсахәт (матурлыҡ).
Ғәсәл (бал) ҡорто кеүек тауышың вәзин (һамаҡ) ит,
Вәзенле (көйлө) булһа ла, ул һөңгөлә бит.
Тауышың менән йомшаҡ бул ғәсәлдәй,
Һөжүм итһә һағыҙаҡ — әжәлдәй.
Кешегә һин аҡырма ишәктәй,
Күңелең менән ойот һин түшәктәй.

”Нәсихәт” тигән шиғырында инде М.Өмөтбаев ата-әсәләрҙе балаларын ”кисен-көндөҙөн иманға” өйрәтергә, ”ғилем эсендә дин юлы”

[1] М.Өмөтбаев архивы, V том, 50-се бит.

барлығын да онотмаҫҡа саҡыра. Шулай булмағанда, ”ҡыямат көн бурысҡа” ҡаласаҡтарын иҫкәртеп үтеүҙе лә кәрәк һанай. Ошоға тартым мотивтарҙы уның икенсе ”Нәсихәт”ендә лә, ”Васыят вә нәсихәт”, ”Ниғмәт шәриф” шиғырҙарында ла осратырға була. Уларҙа ла шағир үҙен ислам дине өйрәтмәләренең реакцион асылына тулыһынса тоғро итеп күрһәтмәгән, кешеләрҙе яҡты донъяла хоҙай биргәнгә шөкөр итеп, бары менән ризалашып йәшәргә туранан-тура өндәмәгән сүрәттә лә береңде икенсең иҙеү принцибына ҡоролған йәмғиәттә ғәҙеллек, кешелеклелек ише юғары әхлаҡ нормаларын урынлаштырыу хыялына бирелеп, халыҡты дини өйрәтмәләр менән ”тәрбиәләп” алыуҙан баш тартмай. ”Гөнаһ булыр” тигән принциптан сығып, ул кешеләрҙе яҡшы холоҡло булырға, нәфсене һимертмәйенсә, бер-берең менән ғауғалашмайынса, берҙәм һәм татыу йәшәргә өндәй; ниндәйҙер шәфҡәтле ағай-энеләрҙең ”ҡеүәттәре” һәм ”дәүләттәре” бар саҡтарында, шөкөр итеп, ”ғәриптәргә” һәм ”фәҡирҙәргә” ярҙам ҡулдарын һуҙасаҡтарына өмөт итә, ә ярлыларҙы ундай кешеләргә ”итәғәт ҡылырға” саҡыра.

Шулай итеп, М.Өмөтбаевтың башланғыс ижадында дини-идеалистик философия эҙҙәре үҙҙәрен ярайһы ғына һиҙҙертә. Бында, әлбиттә, М.Өмөтбаевтың бала сағында мәҙрәсәлә алған белемдән үҙе өйрәнгән бөйөк Л.Толстой ижадынаса һуҙылған дини ағымдың йоғонтоһо үҙ ролен уйнамай ҡалмаған. ”Иш өҫтөнә ҡуш” тигәндәй, оҙаҡ йылдар буйына Диниә назаратында эшләүе лә уның дингә инаныуы арта төшөүгә булышлыҡ ҡына иткән. Ни тиһәң дә, уға дин эштәре, дини әҙәбиәт менән яҡындан танышырға, теләһә-теләмәһә лә, уны пропагандаларға тура килгән. Шулай ҙа М.Өмөтбаевтың донъяға ҡарашындағы һәм ижадындағы динилекте бары ошо субъектив сәбәптәргә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ. Уның объектив сәбәптәре төптәрәк — ул ижад иткән замандың буталсыҡ ижтимағи үҫеш тенденцияларында, В.И.Ленин күсеү осоро тип атаған 1861—1905 йылдар араһындағы социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарҙа ята. Тап ошо осорҙа башҡорт хеҙмәт эйәләре, бер ҡасан да булмағанса, матди яҡтан да, рухи йәһәттән дә икеләтә иҙелеүгә дусар ителде. Өҫтәүенә, батша хөкүмәте улар араһында миссионерҙарҙың эшмәкәрлеген киңәйтеү, ”инородецтарҙы” урыҫлаштырыу һәм урыҫ халҡы менән ҡушыу сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙы тиҙләтә төштө. Былар үҙ сиратында башҡорт халҡының ижтимағи тормошонда исламдың йоғонтоһо үҫә төшөүгә, төрки халыҡтарының мәҙәниәте тарихында Көнбайыш капиталының рәхимһеҙ үтеп инеүенә ҡаршы көрәшеү маҡсатында барлыҡҡа килгән панисламистик, пантюркистик тенденцияларҙың бер ни ҡәҙәре таралып китеүенә килтерҙе. Асылда реакцион булған был күренештәрҙең тәьҫире М.Өмөтбаевтың һәм уның М.Аҡмулла, Р.Фәхретдинов кеүек фекерҙәш ҡәләмдәштәренең ижадына ниндәйҙер кимәлдә дини төҫ биреп, уларҙың дингә ҡарата мөнәсәбәтен билдәләне.

Мәғрифәтсе шағир үҙ әҫәрҙәрендә диндең асылын түгел, ә уның башында торған әһелдәрҙең кире сифаттарын тәнҡитләй, уларҙы халыҡты әхлаҡи яҡтан тәрбиә ҡылырҙай, уға аң-белем бирерҙәй ғилем эйәһе, инсафлы кеше булырға өндәй. Мулламын, тигән кеше ”ғилем

менән изге”, ”көрәш менән бөйөк”, ”һөнәрҙәрҙә алдын булғанда” ғына, уға ҡарата ”мөхәббәт булһын илдәрҙән” тигән фекерҙә тора шағир. Шул уҡ ваҡытта ул уҡыусыларҙы ”мәғрифәт” һәм ”әлфәт”, йәғни дуҫлыҡ-туғанлыҡ таянысы булырҙай муллаларға оло хөрмәт күрһәтергә, хәлдән килгәндә, уларҙы оҫтабикәләре менән бергә көн дә итле бәлеш бешереп саҡырырға, буран булһа, хәлдәрен һорап, ҡарҙарын көрәп торорға кәңәш бирә, сөнки ”уҡыр ул һиңә йөҙ сүрә, ҡотолорһоң йөҙ әмәлдәрҙән”.

М.Өмөтбаевтың дини-идеалистик фәлсәфәгә, яҙмыштан уҙмыш юҡ тигән идеяға нигеҙләнгән шиғырҙары араһында А.Пушкиндың ”Көҙгө йонсоу төндә” тигән билдәле балладаһы йоғонтоһонда яҙылған ”Илаған бала” әҫәре айырылып тора. Ул әсә һәм уның бәләкәй улы араһындағы үтә лә һағышлы диалогҡа ҡоролған. Уның нигеҙенә сабырлыҡтың төбө һары алтын, сабыр иткән — мораҙына еткән тигән идея һалынған. Ниндәйҙер сәбәп менән атаһынан айырылған, ҡайғыһынан һарыға һабышҡан ир баланың ауыр күңел кисерештәрен, ҡайғы-һағыштарын, ”балалары менән хәсрәт сиккән”, ”күҙҙәренән ҡан түккән” әсәнең аяныс тормошон һүрәтләгәндән һуң, автор уларға был михнәтле ғүмер өсөн зарланмаҫҡа, сабыр булырға кәңәш итә, баланы алланан һаулыҡ, именлек һорарға саҡыра. Ә бала көнө-төнө тиерлек тәҙрә янынан китмәй, атаһын зарығып көтә лә көтә. Әсәһенең төрлөсә уның күңелен күтәрергә тырышыуы ла, түҙгәндә генә теләгеңә өлгәшерһең, тип өгөтләүе лә ярҙам итмәй: бала шиңгәндән-шиңә бара. Баллада уның үлер алдынан әсәһенә әйткән теләк-аманат һүҙҙәре менән тамамлана. Бала әсәһенә сыҡ сәләмәтлек теләй, атаһын мотлаҡ күреп, заманында ”теҙендә йоҡлатҡан” улының ”бәғерен һары алып”, айырылышыу утында янып, баҡый донъяға китеүе хаҡында һөйләп биреүен үтенә.

М.Өмөтбаевтың 80-се йылдарҙа яҙған шиғырҙары араһында монархистик рухта ижад ителгәндәре лә юҡ түгел. ”Таж кейгән көнө”, ”Мәскәүҙә Ходынское поле тигән майҙан”, ”Бәйет”, ”Шағир Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтан” исемле шиғырҙар ана шундайҙарҙан. Уларҙа шағир, А.Н.Радищев һүҙҙәре менән әйткәндә, ”гудок геүелдәүенән дә түбәнгә лайыҡ булмаған” батшаға маҡтау һүҙҙәрен йомарт яуҙыра. Ул батшаны алла тарафынан яратылған иң бөйөк зат, халыҡтар араһында именлек һәм ғәҙеллек урынлаштырыусы изге йән, тип иҫәпләй, уны үҙ күҙҙәре менән күреүенә ғорурлана.

Әлбиттә, беҙҙең өсөн М.Өмөтбаевтың дини-идеалистик элементтар менән сыбарланған һәм монархистик рухта ижад ителгән былдай өгөт-нәсихәтле шиғырҙары, бер яҡтан, шағирҙың донъяға ҡарашы заманында шаҡтай ҡаршылыҡлы һәм сикләнгән булыуын, уның аңына шул осор башҡорт ижтимағи фекерендә күҙәтелгән ҡаршылыҡлы төрлө тенденцияларҙың ни тиклем әүҙем килеп инеүҙәрен һәм ижадында ла, әллә ни айырымланып тормаҫтан, уҡмашҡан килеш сағылыш табыуҙарын күрһәтеү йәһәтенән, икенсе яҡтан, башҡорт әҙәбиәтендә иҫке идея-эстетик системанан, суфыйсылыҡ шиғриәтенән яңы идея-эстетик системаға, мәғрифәтселек поэзияһына күсештең нисек ауыр һәм ҡаршылыҡлы барғанлығын танытыу яғынан ғына иғтибарға лайыҡ. Әйткәндәй, М.Өмөтбаев: ”Яҙам, тип йөрөнөм, алдап ғәләмде. Үҙен белмәй, ҡарағыҙ

бисараны, доға эстәр, табалмай һис сараны", — тип үҙенә ҡарата тәнҡит һүҙҙәре ысҡындырғанда, беренсе нәүбәттә ана шул шиғырҙарын күҙ уңында тотҡандыр, моғайын.

Ләкин, дөйөм алғанда, М.Өмөтбаев поэзияһының асылын уның дини һәм монархизм рухында ижад ителгән шиғырҙары түгел, ә демократик ерлеккә тамырланған мәғрифәтселек ҡараштары, тыуған ергә һәм халыҡҡа тәрән мөхәббәт хистәре менән һуғарылған шиғырҙары билдәләй. Уларҙа халыҡ һәм уның реаль тормошо, үткәне һәм бөгөнгөһө сағылышы таба. Уларҙың лирик геройы — туған халҡының яҙмышын ҡайғыртып, уның шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашып йәшәгән кешелекле, кеселекле кеше.

Был шиғырҙарында М.Өмөтбаев беренсе сиратта үҙен Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының тарихы, матди һәм рухи мәҙәниәте тураһында һөйләүсе шағир-тарихсы, шағир-этнограф һәм шағир-публицист булараҡ таныта. Мәҫәлән, уның "Үткән ғүмер, ҡалған хәтер" шиғырында һүҙ башҡорт халҡының үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу көнөнән алып, шағирҙың үҙе йәшәгән осорға тиклемге тарихи үткәне хаҡында бара. Әҫәр авторҙың Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихына ҡараған яҙмаларының шиғыр юлдарына һалынған үҙенсәлекле варианттарын хәтерләтеп ҡуя. Шағир башҡорттарҙың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуын прогрессив күренеш, тип иҫәпләй, үҙе йәшәгән замандағы фәнни-техник яңылыҡтарға, иҡтисад өлкәһендә барған үҙгәрештәргә ыңғай ҡарай:

Беҙҙең заманда юлдарға булды киңлек,
Телеграф, пароход илә именлек.
Беҙ ул заманда — земский гласный,
Тимер юлға тырыштыҡ согласный...

Шағирҙың "Дар хаҡ зәмин башғуран" ("Башҡорт ере (иле) хаҡында хәҡиҡәт"), "Урмансы", "Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы" тигән әҫәрҙәре лә тарихи-этнографик характерҙағы ижад емештәре. Уларҙың тәүгеһендә башҡорт халҡының килеп сығыуы, этник составы, хужалығы, тотҡан дине, ерҙәре һәм һыуҙары хаҡында мәғлүмәттәр бирелһә, икенсеһендә урман башҡорттарының солоҡсолоҡ кәсебе тасуирлана. Этнографик мәғлүмәттәр биреү йәһәтенән һуңғы әҫәр бигерәк тә айырылып тора. Унда әлегәсә аҙ өйрәнелгән рухи культура өлкәһендәге бик ҡатмарлы этнографик күренеш — башҡорттарҙың туй йолаһы бәйән ителә. Күләме, композицияһы йәһәтенән был әҫәрҙе тормош-көнкүреш йөкмәткеле кескәй генә поэма тип тә иҫәпләргә була. Композицион яҡтан ул дүрт "табынға" (бүлеккә) бүленеп, һәр бүлек ҡыҙ йәрәшеү — килен төшөрөү церемонияһының билдәле бер тәртибенә ишара яһай. Бүлектәр араһындағы үҙ-ара бәйләнеш шаҡтай ныҡ. Уларҙа ваҡиғалар, епкә теҙелгән мәрйендәр кеүек, бер-бер артлы логик эҙмә-эҙлектә бәйәнләнә. Ана шул ваҡиғалар "теҙмәһендә" атай йортонан китәсәк ҡыҙҙың һаҡал менән таҡыяһын тубый ҡашмауға алмаштырыу эпизодын хикәйәләүгә уғата иғтибар бирелә. Баҡһаң, ул туй йолаһындағы кульминацион нөктә, ҡыҙ тормошондағы хәл иткес момент икән. Сөнки:

Һаҡал, таҡыя кейгән — йәш ҡыҙ балалыр,
Тубый ҡашмау кейгән — ҡатын булалыр.

Бына шуға ла был йола бик ғауғалы һәм тартышлы була икән:

Ҡатын-ҡыҙ ике булып тартышалар..,
Шәһәр алған кеүек бер тырышалар.
Бара торғас, ҡатын-ҡыҙҙарҙы еңә,
Баҫып барып ала таҡыяны еңгә.

Бер аҙ "өләңдәш иткәндән" һуң, ул ҡыҙға тубый ҡашмау кейҙерә. Инде ул кейәү йортона төшөргә әҙер. Артабан шағир ҡыҙҙың ата йорто, яҡындары һәм әхирәттәре менән хушлашыу күренешен тасуир итә.

Әйтергә кәрәк, шағирҙың тарихи-этнографик эстәлекле әҫәрҙәрендә художестволы башланғыс, образлы фекерләү бик наҡыҫ. Башҡорт халҡы тарихындағы мөһим хәл-ваҡиғаларҙы хронологик тәртиптә һанап, мәҙәниәт тормошондағы бәғзе бер факт-күренештәрҙе рифмаға һалған килеш теҙеп һөйләп сығыу уларҙың төп үҙенсәлеген тәшкил итә. Был тәбиғи, сөнки әҙәбиәткә иң тәүҙә аң-белем сығанағы булараҡ ҡараған М.Өмөтбаев шиғырҙары менән уҡыусыларҙа эстетик зауыҡ, образлы уй тыуҙырыуҙы үҙенең төп маҡсаты итеп һанамай. Уның өсөн иң мөһиме — шиғыр юлдары аша уҡыусыларға белем биреү. Шулай ҙа был әҫәрҙәр ижад ителгән осорҙа реаль тормош, башҡорт ысынбарлығы менән бер ниндәй бәйләнеше булмаған суфыйсыл поэзияның һаман да йәшәп килеүен иҫәпкә алғанда, уларҙың башҡорт шиғриәте тарихында өр-яңы күренеш булғанлыҡтарын күрмәү мөмкин түгел. Улар дини-мистик шағирҙарҙың юҡ-юҡ та шаҡтай мәғәнәле юлдар осраған иң яҡшы шиғырҙарынан да күпкә өҫтөн тора. Сөнки улар "буйы" ғәрәп, "арҡырыһы" фарсы һүҙҙәренән "туҡылған" төрки яҙма әҙәби теленән ныҡ ҡына алыҫлашып, башҡорт һәм уға яҡын ҡәрҙәш татар халыҡтарының һөйләү телдәренә яҡынлашҡан, тәржемәһеҙ ҙә аңлашылған телдә яҙылған. Икенсенән, М.Өмөтбаевтың был шиғырҙары тулыһынса донъяуи башланғысҡа нигеҙләнгән әҫәрҙәр булып, туранан-тура башҡорт халҡының тормошона төбәлгән. Уларҙа милли ерлек, милли колорит һәм ижтимағи хәлдәр сағылышы бар, тарихи дөрөҫлөк бирелгән. Асылда улар башҡорт әҙәбиәтендәге милли тематиканың тәүге бөрөләре булды.

Ғөмүмән, М.Өмөтбаевтың поэтик ижадында дөрөҫлөккә ынтылыу, халыҡ тормошонан алынған документаль факттар менән эш итеү үҙен ныҡ һиҙҙертә. Документаль тормош материалдары менән мауығыуҙың әҙәбиәттә төрлөсә кәүҙәләнеше булырға мөмкин. Шуларҙың бер төрө булған автобиографизм күренешенә беҙ М.Өмөтбаевтың ижадында ла тап булабыҙ. Уны хатта М.Өмөтбаев поэзияһының үҙенсәлеген күрһәтеүсе сифаттарҙың береһе тип иҫәпләргә мөмкин. Әлбиттә, автобиографизм элементтарын теге йәки был кимәлдә башҡорт мәғрифәтсе шағирҙарының һәммәһенең ижадында ла осратырға була. Бының сәбәбе шунда: автобиографик характерҙағы әҫәрҙәрҙең барлыҡҡа килеүе айырым кеше шәхесе менән ҡыҙыҡһыныуҙың үҫә барыуына һәм кешенең бөйөклөгөн күреп, уның йәмғиәттәге ролен дөрөҫ аңлай башлауға бәйле. Ә инде реаль, конкрет кешегә, йәнле тормошҡа ҡарата иғтибарҙың көсәйеүе — мәғрифәтселек идеологияһының формалашыу осоро өсөн иң хас күренеш.

М.Өмөтбаевтың автобиографик характерҙағы шиғырҙарында ла уҡыусыға эмоциональ көсө менән тәьҫир итерлек поэтик образдар юҡ дәрәжәһендә. Уларҙа ла шағир үҙе күргән-белгән нәмәләр йәки ҡатнашлыҡ иткән хәл-ваҡиғалар, үҙенең яҡындары һәм таныштары хаҡында теҙеп һөйләүҙән ары китмәй. ”Дар сәфәр Ҡырым” (”Ҡырымға сәфәр”) шиғырында, мәҫәлән, ул үҙенең Петербургта һәм Ҡырымда күргән ”ғәраиб (күренмәгән, ят) вә ғәжәйеп” нәмәләре, таныштары, уларҙың һәм үҙенең башҡарған эштәре тураһында бәйән итһә, ”Бибикәсемә” тигән һәм атаһы Ишмөхәмәткә арналған исемһеҙ шиғыр өҙөктәрендә баланың нисек итеп ”кис-көндөҙ уйнамағы” хаҡында һөйләп бирә, атаһының дәрәжәһен, эшләгән эштәрен һанап сыға. Шул уҡ ваҡытта: ”Бәнем эшем би бәһрә, китте дәһрә” (”Минең эшем емешһеҙ, ғүмерем бушҡа уҙа”), — тип, үҙ-үҙенән, эшләгән эштәренән риза булмау ҙа, уларҙы аңлы рәүештә кесерәйтә биреп күрһәтеү ҙә, үҙен ябай бер кеше итеп иҫәпләү ҙә хас авторға.

”Йомран иле” һәм ”Шикәйәт” әҫәрҙәре менән М.Өмөтбаев поэзияһының башҡорт халҡының тормошо, яҙмышы менән айырыуса ныҡ бәйләнгән икенсе бер өлөшө башлана. Улар йөҙөндә инде беҙ поэтик образдар аша фекер йөрөтөргә, лирик объекттың рухи эстәлегенә, күренештең асылына үтеп керергә ынтылыш яһаған ысын шағирҙы күрәбеҙ. Уның үҙ халҡының, тыуған төйәгенең аяныс яҙмышы хаҡында уйланып, уға ҡарата үҙенең ҡарашын белдереүе был шиғырҙарҙың үҙәгендә тора.

Ваҡеф эштәре буйынса Ҡырымда ”ғәриб былбыл” булып йөрөгән сағында яҙған ”Йомран иле” шиғырында шағир тыуған яҡ тәбиғәтенең хозур урындарын эске бер йылылыҡ һәм ғорурлыҡ менән тасуирлай. Ләкин гүзәл Ағиҙел, ”аҡ ҡалпаҡ” кеүек ятҡан күлдәр, ”ыласын уйнар яҫы болондар”, мөһабәт ағаслыҡтар уның өсөн ниндәйҙер абстракт матурлыҡ сығанағы, һоҡланыу предметы ғына түгел, ә туған халҡы йәшәгән изге бер төйәк, уның эшмәкәрлегенең объекты һәм йәшәү сығанағы ла. Ул, бер яҡтан:

> Әгәр күл булһа ағасһыҙ,
> Шулай ил ҡала башһыҙ.
> Йә булһа  ауыҙың тешһеҙ,
> Ни  файҙа шул дудактарҙан (ирендәрҙән), —

тип, матурлыҡ объекты, ә, икенсе яҡтан:

> Көйәрһең һәм тирәк өсөн,
> Табалмаһаң кәрәк өсөн,
> Бөгөн, ахыр яраһы өсөн,
> Көйәрһең, булһаң ирҙәрҙән, —

тип, халыҡтың йәшәү сығанағы булған тәбиғәттең вәхшиҙәрсә таланыуын күреп, борсолмай һәм шуға бәйле рәүештә халыҡтың яҙмышын уйлап, хафаланмай булдыра алмай. Ләкин әлегә шағир тыуған ере тәбиғәтенең таланыу сәбәптәре хаҡында ниндәй ҙә булһа фекер әйтеүҙән алыҫ тора. Уның ҡарауы, бындай фекерҙәрҙең эҙе һуңғараҡ яҙылған ”Шикәйәт”тә үҙен ярайһы ғына һиҙҙертә.

Был шиғырҙы әҙәбиәтебеҙ үҫеше тарихында башҡорт мәғрифәтселегенең туранан-тура ер мәсьәләһенә бәйләнгән һәм антиколониаль ха-

рактерҙа булыуын асыҡ күрһәтеп тороусы иң тәүге әҫәрҙәрҙең береһе, тиһәк, һис тә хата булмаç. Ул заманының иң киҫкен социаль темаһына — Башҡортостан тәбиғәтенең, башҡорт ерҙәренең аяуһыҙ таланыуын күрһәтеүгә арналған. Унда шағир, антитеза алымын оҫта ҡулланып, ҡасандыр бай һәм һоҡландырғыс булған Башҡортостан тәбиғәтенең бөгөнгө көндәге аяныс күренештәрен тасуирлай:

Заманында бай булған был ерҙәрҙә,
Тулы урман менән ҡорт, мал-тыуар ҙа,
Күмәк ғәскәр вә закон ярҙамында
Ҡарар тапты сауҙагәрҙәр сауҙаһында.
Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстерханға уҙҙы.
Уның артса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тау кеүек ағас тауары...

Шулай ҙа шағир, үҙенең әйткәндәренән сығып, тейешле һығымтаға килеүҙән, башҡорт ерҙәренең һәм халҡының бөлөп, хәйерселәнеп ҡалыуында царизмдың колонизаторлыҡ сәйәсәте төп сәбәпсе булыуын туранантура әйтеүҙән ситләшә. Бәләнең башын ул башҡорт йәмғиәтендә тамыр ебәргән һәм яңыраҡ ҡына үҙе теләктәшлек белдергән капиталистик мөнәсәбәттәрҙең яуызлығынан күрә. Таяҡтың бер башын "диңгеҙ артынан килгән немецтарға" ла төшөрә.

"Ҡайыш илә Йүкә" исемле әҫәре менән М.Өмөтбаев үҙен башҡорт әҙәбиәте тарихында мәҫәл традицияһын үҫтереүгә ҙур өлөш индергән әҙип итеп танытты. Унан эстафетаны М.Ғафури, С.Яҡшығолов кеүек шағирҙар ҡабул итте. Уларҙың ижади эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә мәҫәл башҡорт әҙәбиәтендә тулы үҫеш алған иң популяр жанрҙарҙың береһенә әүерелде.

Үҙ фекерен уҡыусыға логик эҙмә-эҙлектә, аныҡ итеп еткерергә өйрәнгән "рациональ" шағирҙың мәҫәл жанрына мөрәжәғәт итеүе һис тә осраҡлы түгел. Уның төп сәбәбе үҙен саҡ ҡына һиҙҙерткән һәр хөр фекерҙең батша хөкүмәте тарафынан аяуһыҙ эҙәрлекләнеүендә. М.Е.Салтыков-Щедриндың бик дөрөҫ әйтеүенсә, тап бына ошо ҡыҫымға ҡаршы көрәштә "бер яҡтан, аллегориялар, икенсе яҡтан, был аллегорияларҙы аңлау сәнғәте, юлдар араһынан уҡый алыу сәнғәте барлыҡҡа килде; яҙыуҙың үҙенә бер төрлө ҡолдарса манераһы.., әйтеп еткерелмәгән һүҙҙәр, кинәйәләр һәм башҡа төрлө алдау сараларын уйлап сығарыуҙа иҫ киткес йылғырлыҡ күрһәткән алымы булдырылды"[1]. Социаль-сәйәси мәсьәләләрҙә бик һаҡ М.Өмөтбаевтың һүҙ сәнғәтенең быңдай мөмкинлеген күрмәй һәм унан файҙаланмай ҡалыуы мөмкин түгел ине һәм ул шулай булды ла.

"Ҡайыш илә Йүкә" мәҫәле идея йөкмәткеһе менән дә, поэтик эшләнеше йәһәтенән дә М.Өмөтбаевтың башҡа шиғырҙарынан шаҡтай айырылып тора. Ул уның төп геройҙарының тормошта тотҡан урындарын, синфи тәбиғәттәрен һүрәтләүҙән башлана:

---

[1] Салтыков-Щедрин М.Е. Полн. собр. соч. Т. 15, кн. 2. 185—186-сы биттәр.

Ҡайыш тәрбиәлелер һәм аҙ эшләй,
Уның өсөн тағалар алтын-көмөштө.
Ҡайыш майлы өсөн хөрмәт табалыр,
Йүкәлә ул юҡ өсөн кәм баһалыр.

Бына шулай алтын-көмөш менән нағышланған бик ”тәрбиәле” Ҡайыш һыуға сумып, ”төҫөн асып”, тирә-яҡҡа ”дәүләт сәсеп” йөрөгән ”ефәк таҫма кеүек гүзәл” Йүкәнән үтә ныҡ көнләшә. Берҙән-бер көндө ул Йүкә илен бөтөнләй туҙҙырып ташларға иҫәп тотоп, уның еренә килә. Улар араһында ҡыҙыу алыш башлана. Хәле бөтә башланымы, Йүкә төшә һалып һыу эсә. Уның шунда уҡ ҡеүәте артып китә. Йүкәнән күрмәксе Ҡайыш та һыуға сумып ала һәм һәләкәткә юлыға: ул бөтөнләй ебеп төшә, унда ”май әҫәре ҡалмай”:

Был тартыштан Йүкәнең китте хәле,
Барып һыуға төшөп, алды мәжале (көс-ҡеүәтте).
Эсеп һыуҙы көсәйҙе, тапты ҡеүәт,
Был мәл Ҡайыш бөрөлдө, китте һиммәт.
Әйтә: дошман һыу эсеп тапты ҡеүәт,
Миңә һәм был лайыҡ тип итте йөрьәт.
Кереп һыуға, сығып һәм тотто майҙан,
Һуҙылып китте, ҡарар хоҙайҙан.
Боҙолдо, ҡалманы әҫәре майҙан,
Хур булды, фәҡиргә әйләнде байҙан.

Бында шағир ”серле” жанрҙың мөмкинлектәренән файҙаланып, ”алтын-көмөшлө” һәм ”майлы өсөн хөрмәт тапҡан” Ҡайыш, быларҙың береһе лә булмаған өсөн ”кәм баһалы” булған Йүкә һәм уға йәшәү, көрәшеү өсөн көс-илһам биреп торған һыу — халыҡ массаһы образдары аша йәмғиәттәге синфи ҡаршылыҡты күрһәтеп биреүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуйған, күрәһең. Әҫәрҙә ”бай”, ”ярлы”, ”залим”, ”мазлум” тигән һүҙҙәр юҡ. Ләкин уның дөйөм контексынан улар уҡыусының зиһененә үҙенәнүҙе килә. Тап эзоп формаһы авторға ”Шикәйәт”, ”Йомран иле” кеүек әҫәрҙәрендә үҙҙәрен һиҙҙертә биреп ҡалған социаль мотивтарҙы бер фокусҡа туплап үҫтерергә, киҫкенләштерә төшөргә, йәмғиәттәге иҙеүсе менән иҙелеүсе ҡатламдарҙы бер-береһенә дошман көс рәүешендә дөйөмләштерергә, уларҙың социаль хәлен, синфи тәбиғәтен кинәйә менән үҙ дөрөҫлөгөндә һүрәтләргә мөмкинлек биргән.

М.Өмөтбаевтың был әҫәрҙәре үткән быуат башҡорт поэзияһының, демократик позициянан тороп, халыҡ тормошона, үҙ осороноң социаль-сәйәси атмосфераһына ысын граждандарса үтеп инеүенең иң сағыу өлгөләре булды. Автор уларҙа, шул осорҙа ижад иткән ҡайһы бер шағирҙар кеүек, ысынбарлыҡтан алыҫ торған абстракт нәмәләрҙе түгел, ә конкрет реаль тормошто, ижтимағи мөхитте тасуирланы. Үткән быуаттарҙа мәшһүр Салауат Юлаевтан, Мифтахетдин Аҡмулланан башҡа, башҡорт яҙма поэзияһы майҙанында башҡорт халҡының ҡапма-ҡаршылыҡтарға бай драматик тормошон, ҡайғыһын һәм шатлығын, хыяллынтылыштарын М.Өмөтбаев һымаҡ ысын мәғәнәһендә үҙ йөрәге аша кисереп, уның тарихи үткәне һәм бөгөнгөһө хаҡында шул тиклем ҡыйыу һәм хаҡ тел менән яҙған бер генә шағир ҙа булманы. М.Өмөтбаевтың

шиғриәте — заман рухы, иҫкелеккә һәм томаналыҡҡа, башҡорт халҡының яҡтылыҡҡа юлын быуған йәмғиәт тәртиптәренә һәм ҡанундарына ҡаршы көрәш пафосы менән һуғарылған ижад емештәре ул.

М.Өмөтбаев поэзияһының бер өлөшөн мөхәббәт темаһына яҙылған шиғырҙар тәшкил итә. Уларҙа шағир кешенең мөхәббәт тойғоларын бөтә ҡатмарлығында һәм нескәлегендә кәүҙәләндереүгә дәғүә итмәгән сүрәттә лә мөхәббәттең, тормоштоң үҙе кеүек үк, ҡатмарлы күренеш булыуын, уның кеше тормошон шатлыҡтары менән генә түгел, үҙенең драматизмы менән дә биҙәүен күрһәтеп биреүгә өлгәшә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: ул кешенең психологияһына бәйле хис-тойғоларҙы философик планда асып бирергә, мөхәббәт темаһын, ғөмүмән, шәхес концепцияһы менән бәйләп ҡарарға ынтыла. Шағир өсөн ”мөхәббәт”, ”дуҫлыҡ” һәм ”кешелеклелек” төшөнсәләре — бер-береһенән айырылмаҫ категориялар. Уның шиғырҙарының лирик геройы мөхәббәткә мөнәсәбәттә физиологик яҡҡа ҡарағанда, әхлаҡи-этик сифаттарҙы беренсе планға ҡуйып эш итә. Ошо йәһәттән М.Өмөтбаевтың ”Дуҫка” шиғырына инеш рәүешендә проза менән яҙылған лирик өҙөккә иғтибар итмәй мөмкин түгел. Был өҙөктән аңлашылыуынса, шағир аңында мөхәббәт — ул иң беренсе сиратта һөйгәнеңдең йөҙөндә ысын кешене, тоғро дуҫты күреү тигән һүҙ. Шуға ла ул ”юлдаштарҙан ҡалһа ла, күңелдәрҙә ғишыҡ дәрте һүнһә лә”, хатта ”өмөттәр өҙөлөп, бәхеттәр ҡартайһа ла” һүнмәй торған дуҫлыҡ яҡлы. ”Дуҫка” шиғырында артабан ошо фекер ҡеүәтләнә лә инде. Уның лирик геройы саф мөхәббәткә, ысын дуҫлыҡҡа ”хижран (айырылышыу) уты” ғына кәртә була алмай тигән ҡараштан сығып, үҙенең яҡын дуҫына һағыныу тойғоларын белдереү менән бер рәттән, уны үҙ дуҫын ”мөхиб (яҡын) күреп, хаттар яҙып тормаға”, янып-көйөп бармаҫка, тыйнаҡлыҡ һәм сабырлыҡ күрһәтергә өндәй:

> Яҙ көнөндә эҫе тип, йөрәккә һалма боҙҙо,
> Йәйҙең булыр ҡышы ла, түҙерһең, нитмәк кәрәк.
> Ҡайҙа китте әйткән һүҙ, көлгән йөҙҙәр,
> Илай-илай йәд иткәндә (иҫкә алғанда), дуҫкайым, түҙмәк кәрәк.

Кешенең эске донъяһын, күңел кисерештәрен һүрәтләүе менән авторҙың ”Минең ғишығым” тигән юморға тартым шиғыры ла иғтибарҙы йәлеп итә:

> Һинең торған ереӊ йәннәт, тиһәләр, —
> Барып күрмәй, күңелдәр ял табалмай.
> Ҡашың ҡара, буйың дилбәр (гүзәл), тиһәләр, —
> Гуаһлыҡтан (күреүҙән) йәнем ләззәт табалмай.
> Һинең ғишығың кеүек бер нужа булмаҫ,
> Мәгәр форсат табып янына баралмай.

Ошо хәлдә кешеләр алдында үҙенең ”диуана” кеүек күренеүен лирик герой үҙе лә һиҙеп ҡала һәм үҙ-үҙенән оялғандай:

> Был ахмаҡ, был диуана, тимәгеҙҙәр,
> Ни була, эштәре күп, тиһәгеҙҙәр, —

тип, аҡланыу һүҙҙәрен әйтергә ашыға.

М.Өмөтбаевтың мөхәббәт шиғырҙары араһында образлылығы, мөхәббәт кисерештәрен биреү тәрәнлеге йәһәтенән ”Бер ҡалала гүзәл күрҙем”

шиғыры айырылып тора. Эстәлеге менән бәләкәйерәк поэмаға тартым сюжетлы был әҫәрҙең лирик геройы ”бер ҡалала гүзәл дилбәр” күрә һәм уның күңелендә мөхәббәт хистәре уятып китә. Берҙән-бер көндө юл төшөп, шул ҡаланан үтеп барғанда, ”осҡа еккән аҡ ял туры” аңғармаҫтан ҡыҙ йортона ”ҡайырып керә” һәм аттың хужаһы уғата уңайһыҙ хәлдә тороп ҡала. Үҙенең был хәле тураһында ул ошолай һөйләй:

Һалҡын һарай эсенә тиҙ ҙә керҙем,
Һис тә кемде күрмәйенсә, гиҙәр инем.
Шул мәхбүбте генә йәнә күргән инем,
Хәлем бөтөп, аптырап ҡалдым имде.
Китте минең әҙерләгән хәйләләрем,
Бөттө минең ғәйәрлектән һөнәрҙәрем;
Ҡыйыш булды баҫып торған иҙәндәрем,
Мин-минлеккә төшөп, забун (хур) булдым имде.

Ҡыҙ уға үҙенең хис-тойғоларын, Ләйлә кеүек шашып ғашиҡ булыуын асып һала. Лирик герой үҙе лә бик тәьҫирләнә. Ләкин ул, аралағы йылдар айырмаһына һылтанып, гүзәл алдында өнһөҙ тороуҙан ары китмәй. Уның тойғоларында, йөрәк ҡушыуына ҡарағанда, аҡыл өҫтөнлөк итеңкерәй. Ә ҡыҙҙа ул киреһенсә. Уның:

Ай-һай, егет, бик вафаһыҙ (иғтибарһыҙ) булмағыҙ һеҙ,
Япраҡ кеүек һарғайғанды күрһәгеҙ һеҙ,
Ауырыу башым сәбәбен белһәгеҙ һеҙ,
Аяҡтарың баҫалмай бөгөлөр имде, —

тип, егеткә ”япраҡ кеүек һарғайғанын” белдереп яҙған хатынан һөйөү ялҡынынан ғазап сиккән кешенең эске донъяһы асыла. Унда ышанырлыҡ психологик моменттарҙы осратырға, эскерһеҙ хис-тойғоларҙың — һөйөү һәм һөйөлөүгә ынтылыу дәртенең, яуапһыҙ ҡалған ғишыҡ ғазаптарының, көтмәгәндә осрашып айырылышыуҙан килеп сыҡҡан әсе һағыштың, икеләнеүҙең һәм өмөттөң сағылыштарын күрергә мөмкин. Улар үҙҙәренә ҡарата уҡыусыла борсолоу һәм теләктәшлек хистәре уята, уны уйланырға, тулҡынланырға мәжбүр итә. Тап бына ошо яғы менән М.Өмөтбаевтың был нескә лиризм менән һуғарылған бәләкәй поэмаһы XIX быуатҡа ҡарар башҡорт мөхәббәт поэзияһының күп кенә өлгөләренән өҫтөн тора. Был инде — кешенең эске донъяһын, мөхәббәттән ашҡынған ярһыу кисерештәрен күрһәтеп биргән әҫәр.

Шағир булараҡ, М.Өмөтбаев Көнсығыш классик шиғриәте һәм уның Башҡортостан ерлегендә дауам иттерелгән традициялары, урыҫ әҙәбиәте һәм башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады йоғонтоһонда формалашты, уларға таянып үҫте. Уның шиғырҙарындағы поэтик образдарҙың мәғәнәүи конкретлығы, кешене, уның рухи донъяһын, тормош-көнкүрешен, тәбиғәт күренештәрен һүрәтләүҙәге дөрөҫлөк нигеҙҙә алдынғы урыҫ әҙәбиәтенең реалистик традицияларын ижади үҙләштерергә тырышыуҙан килә. Ә инде стиле, шиғыр төҙөлөшө йәһәтенән уның әҫәрҙәре, айырыуса мөхәббәт шиғырҙары Көнсығыш классикаһының поэтик традицияларына нигеҙләнә. Уларҙың күбеһе ғәрәп, фарсы һәм Урта Азиялағы төрки телле халыҡтарҙың әҙәбиәттәрендә киң урын алған мәснәүи (строфалары 2-шәр юлдан торған һәм а-а, б-б... рәүешендә рифмалашҡан шиғри әҫәр) һәм

робағи (строфалары 4-әр юлдан торған һәм а-а-б-а, в-в-г-в... рәүешендә рифмалашҡан шиғри әҫәр) ҡалыптарында ижад ителгән. Ҡайһы берҙә шағир уларҙы бер үк әҫәрендә аралаштырып та ҡуллана. Ә инде "Бер ҡалала гүзәл күрҙем" әҫәренең аҙағында ул үҙенә тиклемге шағирҙарҙан Ғ.Соҡорой яратып ҡулланған тәүших — акростих формаһына[1] мөрәжәғәт итә. Ул йыш ҡына әле XIII быуатта уҡ әйле башҡорто Ҡол Ғәлиҙең Болғар дәүләте ерлегендә тыуған "Ҡиссаи Йософ" (1233) дастан-поэмаһынан юлланған рәдифле рифмаларҙы, "имде" ише рәдифтәрҙе ҡулланырға ярата. Рефрендар ҡулланған осраҡтары ла юҡ түгел.

Үрҙә беҙ М.Өмөтбаевтың халыҡты бәхетле тормошҡа сығарыуҙы тәьмин итеүсе бер сығанаҡты үҙ заманының күренекле кешеләре эшмәкәрлектәрендә күреүен әйтеп үткәйнек инде. Шағирҙың поэтик мираҫында шул дәүер төрки телле әҙәбиәттәрҙә киң таралған мәҙхиә жанрына оҡшатырға тырышып яҙылған шиғырҙарының осрауы уның ҡарашындағы тап ана шул үҙенсәлеккә бәйләнгән. Лириканың күтәренке һәм матур стиль талап иткән был жанрына мөрәжәғәт итеү үҙ сиратында уны йыш ҡына Көнсығыш классик поэзияһының биҙәктәренә, образдар донъяһына күҙ һалыуға, боронғо төрки яҙма шиғриәтендәге традицион эпитеттар, сағыштырыуҙар, термин-төшөнсәләр менән эш итеүгә килтергән. Уның ҡайһы бер шиғырҙарында, туған телдәге лексик берәмектәрҙе, шиғыр төҙөлөшөнә бер ниндәй зыян килтермәйенсә, еңел генә ҡулланыу мөмкин булған урындарҙа ла, йыш ҡына ғәрәп, фарсы һәм юҡ-юҡ та төрөк һүҙҙәре осрауының бер сәбәбе ана шуның менән аңлатыла ла инде. Бында ғәрәп, фарсы һәм төрөк телдәренең лексик арсеналына мөрәжәғәт итеүҙең үҙ заманының киң таралған традицияһы, яҙма әҙәбиәт алымы булыуын да иҫәптән сығарырға ярамай.

Әммә Көнсығыш әҙәбиәтенең М.Өмөтбаев поэзияһына яһаған йоғонтоһо ана шул рәүешле ни тиклем генә көслө булмаһын, һүҙ сәнғәтен башҡорт милли ерлегенә, халыҡтың һөйләү теленә яҡынайтыуҙа һәм демократлаштырыуҙа уйнаған ролдәре йәһәтенән уның шиғырҙары үҙҙәренә тиклемге поэтик әҫәрҙәрҙең күбеһенән байтаҡҡа өҫтөн тора. Уларҙа фольклорҙан ингән мотивтар һәм символик образдар, уның айырым бер өлгөләре (мәҫәлән, "Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы" әҫәрендәге "өләң" тексы), ерле халыҡтың көндәлек тормош-көнкүрешенән, тыуған төбәк тәбиғәтенән алынған образдар һәм күренештәр, атамалар һәм төшөнсәләр, башҡорт теленә генә хас һүҙҙәр, халыҡсан әйтемдәр һәм фразеологик берәмектәр йыш осрай; урыҫ теленән алынып, төрлө маҡсаттарҙа ҡулланылған лексик берәмектәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән:

Йәй артынан хәзән (көҙ) етһә, китер ҡош,
Ыласының, шоңҡарың осто — ҡулың буш;
Китте ҡыш, инде яҙ килде,
Ыласын һәм торна, ҡаҙ килде;

[1] Был форма менән яҙылған шиғри әҫәрҙең юл башы хәрефтәрен өҫтән аҫҡа теҙеп уҡыһаң, йә авторҙың, йә шиғыр бағышланған кешенең, йә әҫәрҙең үҙ исеме хасил була.

Аҡыллылыр күп белеп аҙ һөйләгән,
Белекһеҙҙер аҙ белеп суҡ һөйләгән;
Бейек осмаҡтан ҡарға йораты
Ғәләмдә ҡарсыға булмаç;
Хеҙмәт итһәң мәслихәт һәм илеңә,
Ебәк билбау булыр ул үҙ билеңә;
Мәгәр кем үҙенә хайран,
Ҡалыр ул белмәйенсә һәнкам (матурҙы).

Ошо йәһәттән М.Өмөтбаевтың ҡулъяҙмалары араһында ”Өгөт вә нәсихәт йыраուы” тип нарыҡланған шиғырҙың булыуын да әйтеп үтергә кәрәк. Дөрөç, был әçәр йырауға ҡарағанда, робағи формаһында яҙылған васыятнамәгә тартым. Шуғалыр ҙа ”Ядкәр”ендә шағир уны ”Васыят вә нәсихәт” тигән баш аçтында баçтырған. Әммә, нисек кенә булмаһын, был факт М.Өмөтбаевтың туған халҡының фольклорында тупланған поэтик традицияларға иғтибарлы булыуы, уларҙы ижади үҙләштерергә тырышыуы тураһында һөйләй. Әйткәндәй, ауыҙ-тел поэзияһының был боронғо традицияһына мөрәжәғәт итеү М.Өмөтбаевтан һуң башҡорт әҙәбиәте тарихында күҙәтелмәй.

М.Өмөтбаев заманына күрә халыҡҡа аңлайышлы телдә яҙырға, әçәрҙәренең телен мөмкин тиклем башҡортлаштырырға тырышҡан. Замандаштарының шаһитлыҡ итеүенсә, айырым хәтирәләрҙән күренеүенсә, ул үҙ ижадын, ”үҙенең яҙыуын башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ тип хис иткән”, әçәрҙәрен матбуғатҡа биргәндә, тел яғынан ”аҙ ғына тәçәррөф (төҙәтмә) итеүҙе лә татарлаштырыу һәм башҡортлоҡҡа енәйәт ҡылыу” тип иçәпләгән[1]. З.Шакировтың әйтеүенсә, шағир ”һөйләшкәндә лә, хатта төркисә яҙған шиғырҙарын уҡығанда ла, үҙе лә һиҙмәçтән, төрки телен башҡорт һүҙҙәре, башҡортса әйтештәр менән сыбарлап һөйләшер һәм уҡыр булған”[2]. Ҡайһы бер әçәрҙәренең аçтына үҙ имзаһын ҡуйғанда ла ул ”башҡорт” һүҙен өçтәр булған. Әлбиттә, былар һис кенә лә милләтселек күҙлегенән сығып атҡарылған эштәр түгел, бәлки шул осор башҡорт йәмғиәтендә күҙәтелгән дөйөм милли уяныуҙың М.Өмөтбаев ижадында ныҡлап асыҡ сағылыш таба башлауы күренештәре ине.

Ҡыçҡаһы, М.Өмөтбаевтың фәлсәфәүи тәрән уйҙар, ҡайнар хистәр һәм гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған шиғри әçәрҙәрендәге бөтә был элементтар, халыҡҡа аңлайышлы поэтик тел бер оло маҡсатҡа — Башҡортостан ерен, уның тәбиғәтен бөтә хозурлығында күрһәтеү, башҡорт халҡының милли йөҙөн, тарихи үткәнен һәм бөгөнгөһөн бөтә дөрөçлөгөндә сағылдырыу, уны аң-белемле, юғары мәҙәниәтле һәм әхлаҡлы итеү аша бәхетле тормошҡа илтеү маҡсатына буйһондоролдо. Уның шиғриәте ысын мәғәнәһендә милли колоритлы ижад емештәренән ғибәрәт. Бына шуға ла М.Өмөтбаевты икеләнмәйенсә башҡорт милли поэзияһының ныҡлы нигеҙ таштарын һалыусы шағирҙарҙың береһе тип әйтергә мөмкин.

---

[1] Фәхретдинов Р. Тәржемәи хәл вә тәбәкат китаптары // Шура, 1915, № 2. 49-сы бит.

[2] Башҡортостан Фәндәр академияһының ғилми архивы. Ф.3, Оп. 25/2.